*Ҡамса МОРТАЗИН*

# АҠМУЛЛА РУХЫНА ТОҒРОЛОҠ

Башҡорт әҙәбиәтенең яҡты йондоҙо, үҙенең бар ғүмерен халҡына арнаған шағир Мифтахетдин Аҡмулла яҙмышы кемдәрҙе тетрәндермәгән дә, саф шишмәләй тынмаҫ йыр-моң булып ағып ятҡан шиғриәте кемдәрҙе генә һоҡландырмаған?! Әлбиттә, бик күптәрҙе арбап, үҙенә әсир иткән, үҙенең мәңгелеккә саҡырып торған моңо менән күңелдәрҙә урын алған уның әҫәрҙәре. Өс туғандаш халыҡ: башҡорт, татар, ҡаҙаҡ халыҡтарының уртаҡ улы булып китеүе лә шунан килә торғандыр. Башҡорт ерлегендә тыуып үҫеп, үҙ халҡының аһ-зарҙарын оло йөрәге аша уҙғарып «Башҡорттарым, уҡыу кәрәк!» тиеп өҙҙөрөп өндәшеүҙәре бөгөн дә актуаль яңғырай. Минеңсә, милләт асылын, уның киләсәген ҡайғыртыусы мәғрифәтсе М. Аҡмулла бөтә рухы менән бөгөн дә көрәштә. Сөнки, тарих ҡабатланып тора тиһәләр ҙә, ул үҙ әйләнешендә яңы үрҙәргә һәм яңы боролоштарға осрап, үҫеш кисерә. Һүҙемде Аҡмулланан башлауым тәбиғи. Әйтер һүҙем үҙ дәүерендә Аҡмулланы борсоған проблемалар хаҡында, дөрөҫөрәге, бөгөнгө Силәбе башҡорттарының һулышы, йәшәйеше тураһында. Әлбиттә, беҙ бөгөн Аҡмулла дәүеренән ярайһы уҡ алыҫ йәшәйбеҙ. Заман башҡа, заң башҡа, тиһәләр ҙә, был төбәк башҡорттарының бөгөнгө хәле бик күптәргә мәғлүм. Улар үҙҙәренсә көрәшеп-алышып йәшәйҙәр һәм уларҙың үҙҙәренә генә хас йәшәү рәүеше бар. Фән, ижад, сәнғәт, мәҙәниәт өлкәләренә айырым туҡталып, ундағы проблемалар хаҡында оҙон-оҙаҡ һөйләргә булыр ине. Мин, әҙәбиәт һөйөүсе булараҡ, бөгөн Аҡмулла һуҡмағынан йөрөүселәр донъяһына, ошо төбәккә сәйәхәткә алып инмәксемен. Һүҙ дүрт йыл самаһы эшләп килгән «Аҡмулла» әҙәби берекмәһе хаҡында.

Әҙәби берекмәнең барлыҡҡа килеүендә иң беренсе нәүбәттә танылған шағир Рамаҙан Шәғәлиевтың роле ҙур. Сабыйға тәүге аҙымдарҙы яһауы ни тиклем ауыр булғанлығы һәр кемгә билдәле. Рамаҙан ағай ошо мәлдә был эште етәкләне һәм уға һулыш бирҙе. «Башҡортостан» ҡыҫҡаса энциклопедияһында әйтелгәнсә: «1959 йылдан алып татар-башҡорт үҙешмәкәр коллективы етәксеһе, 1975 йылдан «Айгөл» йыр һәм бейеү ансамблен етәкләй. 1962-82 йылдарҙа татар-башҡорт әҙәби берекмәһенә етәкселек итә». Хеҙмәтенә күрә хөрмәте тигәндәй, яҡташтары, Силәбеләр, танылған шәхескә ихтирам менән ҡарайҙар. Рамаҙан ағай бөгөн дә шул башланғыстарҙы дауам итә. Милләт проблемаларына битараф түгел ул.

*Һөйгәнемдән айырһаң айыр әйҙә,*
*Ҡанатымды ҡайырһаң ҡайыр әйҙә,*
*Тик айырма мине тыуған илемдән,*
*Мәхрүм итә күрмә туған телемдән,* —

тип яҙа шағир.

«Аҡмулла» әҙәби берекмәһе төрлө һөнәр кешеләрен берләштерә: уҡытыусылар, эшселәр, мәҙәниәт хеҙмәткәрҙәре. Улар араһында хаҡлы ялға сыҡҡан кешеләр, фронтовиктар ҙа бар. Шиғриәт менән мауығыусылар ҙа, проза жанрында үҙҙәрен һынаусылар ҙа, халыҡ ижа-

ды ынйыларын йыйыу менән шөғөлләнеүселәр ҙә бар. Зөлфирә Исрафилова, Мөнирә Хәлимова, Флүрә Мөхәмәтшина, Эльвира Вертякова, Ҡыям Низаметдинов, Зәйнулла Зарипов, Фәрит Хәсәнов, Ирек Сабитов, Нурлыхаҡ Фәйзуллин, Урал Ҡолошев, Әхмәт Рафиҡов, Булат Батталов, Басир Рафиҡов, Мөхәммәт Хәбиров. Уларҙың ижад кимәле төрлөсә. Мәҫәлән, Урал Ҡолошев, Эльвира Вертяковалар, ғазаплы ла ижад эшенән йәм һәм көс табып, үҙҙәренсә моңлана, әҫәрҙәренә йөрәк хистәрен күсереп, үҙҙәренә генә хас бейеклектәрҙә замана тулҡындары менән алышып йәшәйҙәр. Әлбиттә, уларҙың барыһының да танылған әҙиптәр булып китеүе лә шарт түгел.

Ут-һыуҙар кискән олпат фронтовик Әхмәт Рафиҡов — әҙәби берекмәнең иң тәүге ағзаларының береһе. Уның «Хәтеремдә» тигән шиғырында шундай юлдар бар:

*«Аттар иламай...» — тип кемдәр әйтә?..*
*Онторға мөмкин түгел дә —*
*Йәш тайҙарҙан ҡалған байталдарҙың,*
*Кешнәүҙәре ҡолаҡ төбөндә,*
*Ишетелә кеүек бөгөн дә,*
*Онοторға мөмкин түгел дә...*

Шулай хафалана элекке яугир.

Йәш шағир Булат Батталовтың шиғырҙары лирикаға тартым. «Әсәйемдең ҡомартҡыһы» тигән шиғырында бына нәмә ти:

*Ул ялбарып һорағандыр:*
*«Хоҙай, тик шул уйымда —*
*Насип итһен үлергә тип,*
*Балаларым ҡулында».*

Артабан шағир барлыҡ өгөт-нәсихәттәрҙән ҡотолоп оҫта дөйөмләштерә:

*Әсәйемдең төҫө итеп,*
*Һаҡлап киләм мендәрен.*
*Бушап бөткән, йомшаҡ ҡына,*
*Йомшара күңелдәрем.*

Йәш көстәр араһында бына-бына асылырға торған шағирҙар ҙа бар.

Мәҫәлән:

*Көҙгө урман япраҡ ҡойған,*
*Ысыҡ менән үлән тулған.*
*Керпектәргә йәш сыланған,*
*Минең менән ни хәл булған?!* — тигән риторик һорау ҡуя «Көҙгө томан» тигән шиғырында Эльвира Вертякова. Эйе, тормош һөйөү-һағышһыҙ булмай. Донъя яратыуҙан яралған, тиер аҡыл эйәһе. Эльвира ла күңел кисерештәрен тәбиғәт теле аша әйтергә ынтыла.

*... Төтөн һымаҡ көҙгө таңдар,*
*Томанланған минең уйҙар.*
*Көҙгө томан өмөт аса,*
*Зәңгәр төҫтә уйҙар оса.*

Былар бөгөнгө «Аҡмулла»ның рухи эҙләнеүҙәре һәм ҡайһы бер табыштары ла тиер инем мин. Әлбиттә, бөтә әҫәрҙәргә тулайым анализ уҙғарылмаһа ла, ҡайһы бер моң-аһәңдәр шуларҙан ғибәрәт. Уларҙың әҫәрҙәре «Шоңҡар», «Ағиҙел» һәм башҡа баҫмаларҙа сығып килә.

Бөгөнгө «Аҡмулла» әҙәби берекмәһенең бурысы — тупланған ижади көстәрҙең үҫешенә булышлыҡ итеү, ижад кешеһенең үҙ тауышын, ағымын табыуҙа ярҙам күрһәтеү. Әҙәби берекмә ултырышында ижад хаҡында етди һөйләшеүҙәр уҙғарыла, төрлө бәхәстәр тыуа, тәнҡит-маҡтау һүҙҙәре лә әйтелә — былар барыһы ла дөйөм үҫешкә булышлыҡ итә. Әҙәби берекмә ҡала мәктәптәрендә лә осрашыуҙар ойоштора, төрлө йәһәттән үҙ эшен йәнләндереүгә ынтыла. Шулай ҙа әҙәби берекмәнең мөһим проблемаларының береһе — йәштәрҙе ылыҡтырыу. Әлбиттә, алма бешмәй өҙөлөп төшмәй, тигәндәй, ижад эше өсөн һәр йәһәттән дә өлгөрөү шарт. Ҡасандыр әҙәбиәтебеҙ өсөн Ғ.Сәләм, Ҡ.Даян, М.Хәй, К.Кинйәбулатова кеүек талантарҙы биргән бәрәкәтле төбәктең дә быуалары йырылыр ул.

